

***Фирҙәүес БӘШИРОВА,***
***“Татарстан Республикаһы башҡорттары королтайы“ башҡорт милли-мәҙәни автономияһы етәксеһе***

# ”Ватандаш”ҡа Ҡазандан бер ҡараш

Беҙ, Татарстан Республикаһы башҡорттары ҡоролтайы активистары, “Ватандаш“ журналы менән баҫманың тәүге һанынан башлап хеҙмәттәшлек итәбеҙ. I һәм II Бөтә донъя башҡорттары араһындағы ваҡыт ижтимағи ойошманың иң әүҙем хеҙмәттәшлек осоро булды. Ҡыҙғаныс-ҡа ҡаршы, III ҡоролтай сәбәпһеҙ һәм нигеҙһеҙ рәүештә бик оҙаҡ кисектереләп, проблемалар ҡатмарлашты. Сәйәси, социаль, иҡтисади хәлдәрҙәге үҙгәрештәр иҫәпкә алынманы, һәм, бөгөн килеп, һуңғы ҡоролтайҙа ҡабул ителгән күпселек документтар ғәмәлгә яраҡһыҙ икәнен күрәбеҙ. Шул сәбәпле яҡын арала IV ҡоролтай саҡырылырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Ошо йәһәттән “Ватандаш“тың системалы, күп яҡлы эш алып барыуы отошло. 15 йыл дауамында журнал күрше регионтарҙа йәшәгән башҡорттарҙың тормошо, ауылдар тарихы тураһында күп, бай мәғлүмәт бирҙе. Статистик мәғлүмәттәр ҡоролтай эшендә бик мөһим, файҙалы. Әммә беҙҙең өсөн иң мөһиме — ҡиммәтле тәҡдимдәр, эш йүнәлештәре һәм алымдары буйынса рекомендациялар. Беҙгә сәйәсмәндәр, ғалимдарҙың тәҡдимдәре бик кәрәк.

Әммә Башҡортостандағы сәйәсмәндәр, ғалимдар беҙҙең тәҡдимдәргә лә ҡолаҡ һалһын ине. Быны өсөн күршеләрҙәге тәжрибәне лә ҡулланырға кәрәк. Мәҫәлән, Татарстанда Бөтә донъя татарҙары конгресы нисек эш итә? Улар 90-сы йылдарҙа уҡ конгресс активистарын, етәкселәрен парламентҡа үткәреп, үҙ идеяларын хөкүмәт ағзалары, депутаттар аша тормошҡа ашыра башланы. Принципиаль талаптарҙан сығып ҡараһаң, был практика — иң һөҙөмтәле, эффектив сәйәси алым. Рәсәй шарттарында бығa сәйәси партиялар менән хәҙмәттәшлек аша өлгәшергә мөмкин. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Башҡортостанда ике тиҫтә йыл дауамында ундай мөмкинлек булманы.

Был шарттарҙа матбуғат баҫмаларының, телевидениеның роле арта, тип иҫәпләйем. “Ватандаш“ — яңы социаль-сәйәси шарттарҙа иң юғары кимәлдә эшләй алған баҫма, ҡоролтай активистары был ресурсты әүҙем файҙаланырға тейеш.

“Ватандаш“ журналы матбуғатта бик мөһим функция үтәй. Киләсәктә лә баҫма үҙ принциптарына, тәғәйенләнешенә тоғро ҡалыр, тип ышанам, редакция коллективына уңыштар теләйем.